■ Ислам әҙәбе

# ЙӘШ ҒАИЛӘГӘ НӘСИХӘТТӘР

Гүзәл СИТДИҠОВА

Собханалла, бөгөн һин Хаҡ Тәғәләбеҙ ҡушҡан изге ғәмәл - никах ғәмәлен башҡарҙың һәм ошоноң менән үҙең, атаәсәң, ҡанбабаларың, Раббыбыҙ алдында кәләшең, тыуасаҡ балаларың өсөн яуаплы бурыс алдың. Ошо бурыстарыңды үтәүҙә хаҡ мосолман тәҡүәлеге, камил аҡыл, үткер зиһен, тулы иман бирһен Аллаһыбыҙ.

Иманлы, тәүфиҡлы, ғүмер буйы юлыңды яҡтыртып, йән йылыһын бүләк итерлек ҡыҙ баланы хәләл ефетлеккә насип ҡылһын Хаҡ Тәғәләбеҙ. Рәсүлуллабыҙ, ғәләйһиссәләм, былай тигән: "Ҡатындарға байлығы, дәрәжәһе, сибәрлеге, динлелеге өсөн өйләнәләр. Ҡулың туҙанға батып бөтһә лә, динлеһенә өйләнергә тырыш". "Туҙанға батыу" - динлегә өйләнгән осракта хатта "ярлылыктан ҡулың ҡара эштән бушамаҫ булһа ла" тигәнде аңлата. Әммә ғфкфше ндә үрҙә әйтелгән һәммә сифаттар булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Байлыҡ та, дәрәжә лә, сибәрлек тә - юғалыусан, шулар өсөн генә өйләнгән булһаң, диниһеҙ, йәғни, хаяһыҙ, ирен ололоҡлай белмәгән ҡатын менән нисек донъя көтәрһең,

Ислам ҡатын-ҡыҙға гүзәл мөнәсәбәт талап итә, һәм уны һис бер диндә булмаған бейеклеккә күтәрә. Әсәләргә, ҡатын-ҡыҙға мөнәсәбәттең иң камил өлгөләрен беҙ Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм хәҙистәренән күрәбеҙ. "Камил иманлы кеше ул - холҡо күркәм булғаны, шулар араһындағы иң яҡшыһы - ҡатынына яҡшы булғаны", - тигән Рәсүлуллабыҙ.



Исламда никах хайуани хистәрҙән юғары тора, ғаилә башлығы сабырлығы, шәфҡәтлелеге, өй эсендәге ваҡтөйәк етешһеҙлеккә иғтибар итеп бармауы, асыуын тыя белеүе, киң күңеллелеге менән айырыла. Хатта ҡатынының диндән сыҡмай торған ваҡтөйәк етешһеҙлектәренә лә бик иғтибар итмәй, матур яҡтарын күрергә тырыша. Ғаиләлә берлек һәм мөхәббәт хөкөм һөрөргә тейеш. Әфәндебеҙ Мөхәммәт, ғәләйһиссәләм: "Һеҙҙең хәйерлегеҙ - ҡатындарығыҙ өсөн хәйерле булғанығыҙҙыр", - тигән. Хәҙистәрҙең береһендә ҡатындар затының кәкре ҡабырғанын яралтылғаны телгә алына. "Кәкре булһа ла - унан ләззәтлән, ә инде төҙәйтергә маташһаң - һындырырһың, һындырыуың иһә айырылыуың булыр", тип иҫкәртә хәҙис.

Хаҡ мосолман - камил ир, өйөнә йылмайып ҡайтып инер, ҡатынын, балаларын матур мөғәмәлә менән, Аллаһ исеме менән сәләмләр. Уның ҡайтыуын яҙ килеүе, шатлыҡ, бәхет өҫтәлеп килеүен көткән төҫлө көтәрҙәр.

Ҡатынына ярҙам кәрәген күрһә, булышыр, нимәгәлер зарланһа - йыуатыр, аңлатыр, яҡшы ашатыр, кейендерер. Ир кешенең йән сихәте, ғишыҡ-ғишрәте үҙ хәләл ефете менән генә булырға тейеш. Уйнаш - кеше үлтерергә тиң оло гонартарҙан һанала. Ҡатыны ире янында үҙен яҡлаулы, һөйөклө итеп тойһон.

Шәриғәт ҡушҡан сиктәрҙә ир матур кейенергә, бөхтә булырға, мөхәббәтлелеген юғалтмаҫҡа тырышырға бурыслы. Ирҙең ҡатынына хаҡы булған кеүек, ҡатындың да иренә хаҡы бар. Эш, дуҫ-иш - үҙ урынында, ғаилә иһә - төп урында.

Хәҙистәрҙән күренеүенсә, ғаилә башлығына ошондай кәңәштәр ҙә бирелә:

* Алланың ризалығы өсөн ғаилә ҡороп, мосолман үҙ ҡатынын үҙенә тиң шәхес итеп күрә, уны ихтирам итә, серҙәрен һаҡлай. Бындай мөнәсәбәт ғаиләгә сит-яттарҙың да ихтирамын арттыра;
* мосолман сит-ят алдында ҡатынының йөҙөн йыртмаҫ, ризаһыҙлығы булһа, тейешле ваҡытын, урынын һайлап ҡына әйтер;
* ҡатынының ата-әсәһенә, туғандарына тел тейҙермәҫ, низағлашып йөрөмәҫ, сөнки был рәүешле ул үҙ ҡатынын да оятлы итер, рәнйетер;
* ҡатыны, уның ата-әсәһе менән уртаҡ тел табып, шул уҡ ваҡытта үҙ ата-әсәһен дә хөрмәтләргә, уларҙы тыңларға, мөнәсәбәттәрҙә тигеҙлек табырға бурыслы;
* мосолман балалары алдында иҫ киткес ҙур яуаплылыҡ тоя, күркәм тәрбиә бирә, быны өсөн бер нимәне лә йәлләмәй, уларҙы айырып ҡарамай.

Ир кеше тулыһы менән ҡатыны өсөн яуаплы, һәм ҡиәмәт көнөндә мосолман үҙ ҡылғандары өсөн генә түгел, ә ҡатыны, балалары ҡылғандар өсөн дә яуап тотасаҡ. Шуның өсөн дә ул ҡатынының, балаларының динле, тәҡүә булыуын хәстәрләйәсәк.

Ислам динендә ирле-ҡатынлылар тарафына булған һәммә нәсихәттәр бер нөктәгә барып терәлә - ғаилә хәлен төҙөк тотоу һәм күркәм рәүештә донъяла йәшәүҙе тәьмин итеү.

# ХЕҘМӘТ ИТЕҮ - БЕР ҒИБӘҘӘТТЕР

Һәр шәхестең һәм милләттәрҙең хәйерле тормошоноң хозур һәм рәхәт йәшәүенең сере - күп хеҙмәт итеүҙәрендә, нык тырыш булыуҙарында. Ғәйрәт менән, ихласлыҡ менән хеҙмәт итеү уңышлы булыу ғына түгел, шул уҡ заманда һаулыҡ-сәләмәтлектә йәшәү. Эшләгән кеше үҙенә, ғаиләһенә, милләте һәм кешелеге хаҡына хеҙмәт итер, көслө һәм сәләмәт булыуын тәьмин итер. Тормошта даими хеҙмәт юлында булыуҙы ғәҙәт иткән кешегә эш - ғазап-яфа түгел, ул - бер ләззәт һәм күңел хушлығылыр.

Эшләгән кеше - бәхетле кеше. Ундай кешегә башҡа төрлө бәхет сараларын эҙләүҙең кәрәге юҡ.

"Бисмилләһ" менән башланған, Аллаһтың ризалығына теләп, һөйөнөп, ысын күңелдән эшләнгән эш - ул ғибәҙәттер. Аллаһ әмер иткән көндәлек ғибәҙәттәрҙе баш-ҡарыусы - ул үткән замандарҙан файҙалы бер эш менән киммәтләндергән кеше. Иртәнге намаҙына ҡылып, тамаҡ туйҙырып, баҫыуға ер һөрөргә киткән кеше, кибетен асҡан сауҙагәр, хакимиәт хеҙмәткәре, ғәскәри хеҙмәттә булған йәш егеттәребеҙ "Бисмилләһ" менән эшен башлай, Аллаһтан уңыш һәм иминлек теләп, һис арымайынса, иғтибарын боҙмайынса, зарланмайынса эшләй. Һәр кем үҙенә йөкләнгән вазифаһын тулы ҡәнәғәтләнеү эсендә йәһәтлек менән башҡарһа, белһен: уның хеҙмәт ваҡытының һәр минуты, һәр сәғәте махсус ғибәҙәттә үтә.

Аллаһы Тәғәлә бойорҙо:

***"Белеп тор, эй, әҙәм балаһы! Кешегә үҙе ҡылмыштарынан башҡа һис бер нәмә йөкләнмәҫ. Уның ҡылмыштарына киләсәктә баһа биреләсәк. Һуңынан ҡылмыштарына күрә әжерен дә аласаҡ"*** ("Ән-Нәджм" (Йондоҙ) сүрәһе, 39-41-се аяттар).

Исламиәттә донъя өсөн Әхирәтте, Әхирәт өсөн донъяны ташлау юҡтыр. Ысын мосолман - һис үлмәйәсәкмен, тигән кеүек донъя өсөн, иртәгә үләсәкмен, тигән кеүек Әхирәт өсөн ғәмәл итеүсе кешеләр.

Бөйөк Раббыбыҙҙың был туралағы бойороғо:

***"Аллаһтың һиңә биргән мөлкәтенән әжер (хәйер, саҙаҡа, зәкәт) биреп, Әхирәт көнөнә әҙерлән. Донъялағы өлөшөңдө лә онотма. Аллаһ һиңә бәрәкәт биргәне кеүек, һин дә (кешеләргә саҙаҡа биреп) йомарт бул. Ер йөҙөнә боҙоклоҡ таратма. Аллаһ боҙоҡтарҙы һөймәҫ"*** ("Әл-Ҡасас" (Хикәйә) сүрәһе, 77-се аят).

Ата-бабаларыбыҙ телендә эштәренең йәмғиәт өсөн ни дәрәжәлә мөһим булыуы хаҡында бик күп мәҡәлдәр бар. Шуларҙың бер нисәһе менән күңелдәребеҙҙе яҡтыртайыҡ:

***"Бер милләттең етешкәнлеге кешеләрҙең эшсәнлеге һәм ғилемлеге менән үлсәнә";***

"Ҡырмыҫҡанан ғибрәт ал - йәйҙән ҡышҡа әҙерлән".

Мәшһүр шағир Ғабдулла Тукай әйткәнсә:

***"Эй, сабыйҙар, эшләгеҙ һеҙ, иң мөҡәддәс нәмә - эш. Эш ағасы һәр ваҡытта бик йомарт килтерер емеш".***

Ғалимдарыбыҙ ҙа тормош сәхнәбеҙҙәге хәҡикәтте ошо һүҙҙәр менән тәфсирләгәндәр. Белегез, тормош - ул көрәш тимәктер. Был тормошта уңыштар ҡаҙаныу фәҡәт тырышлыҡ менән генә хас, һис бер ваҡытты исраф итмәгеҙ, сөнки үтеп киткән һәр көнөбеҙ, шишмәнән урғылып сыҡҡан һыу кеүек кире килмәйәсәк.

Заман дәүерендәге ғүмеребеҙ - ул Аллаһтың инсандарға биргән иң бөйөк ниғмәтелер. Ғүмер ул беҙҙең ҡулыбыҙға тапшырылған бер хазина, һис шикһеҙ, һәр бөртөгө өсөн беҙҙән хисап һораласаҡ.

Һәр мосолман, мәшәҡәт килгәнсе - буш ваҡыттың, үлем килгәнсе - ғүмереңдең, ауырыу килгәнсе - сәләмәтлектең ҡәҙерен белер. Аллаһтың биргәндәрен үҙе, милләте, ғаиләһе өсөн иң яҡшы һәм файҙалы урында ҡулланыр.

Һәр төрлө ниғмәт, хөрмәт хеҙмәт менән ҡаҙанылыр. Аллаһ бар иткән бөтә мәхлүҡтәрен кеше әмеренә тапшырған. Кешегә быларҙан файҙаланыу өсөн кәрәкле аҡыл, зиһен зирәклеген дә биргән. Ана шул Ислам динебеҙҙән аҫылын йөрәгенә алған әҙәми заттар, һәр мөьмин дауамлы хеҙмәт эшсәнлеген булдырған хәлдә донъяла һәм Әхирәттә максатҡарына ирешә ала. Эшен яратып, иғтибар һәм тоғролоҡ менән башҡарған кешене Аллаһ та, пәйғәмбәребеҙ ҙә ярата.

Яҡшы мосолман ваҡытының ҡәҙерен белер, бөгөнгө эште иртәгә ҡалдырыу юлына баҫмаҫ.

Тыуған йортобоҙ Башҡортостан һәм бөтә Ислам өлкәренең бөгөнгө хәленә ҡарағанда, беҙҙең ҡәүемдәребеҙгә, беҙҙең нәҫелдәребеҙгә тағы ла ныҡыраҡ, тағы ла тырышыбыраҡ хеҙмәт итергә кәрәклеге күренә.

Шәхесебеҙ һәм милләттәребеҙҙең бәхетле киләсәге - һәммәбеҙҙең вазифа яланында биремле һәм файҙалы эштәр башҡарыуыбыҙҙа.

Был мөғжизәле заман эсендә йәшәгән сағыбыҙҙа, үҫеш, күтәрелеү, милли дәрәжәне арттырыу, мәҙәниәттең юғары баҫҡыстарына күтәрелеү - барыбыҙҙың да милли һәм дини вазифабыҙҙыр.

Мөхәммәт ҒӘЛЛӘМ.